**- Ҡәнзәфәр бей-мөһим шәхес, – тине үҙ сығышында тарих фәндәре кандидаты, журналист-продюсер, алып барыусы Һәм телепроекттар авторы Салауат Хәмиҙуллин. - Дим төбәге халҡы өсөн генә түгел, бөтә башҡорт халҡы өсөн дә. Ҡәнзәфәр бей беренсе илсе булып, мең ырыуы башлыҡтары исеменән, Батша Иван Грозныйҙан мең ырыуының Үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылыуын һорай.**

**Тарихи хәл драматик була. Ул дөрөҫ ҡарар ҡабул иткән. Бөгөн беҙ уның сәйәси зирәклегенә, аҡыллылығына хөрмәт күрһәтәбеҙ. Ул ысын халыҡ көрәшсеһе булған.**

**"Шишмә башҡорт ере донъя мәҙәниәтенә ҙур өлөш индерҙе, бик күп талантлы кешеләрҙе донъяға бирҙе: Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш, Муса Ғәли, Денис Исламов, Зәйтүнә Бикбулатова, Фәриҙә Ҡудашева кеүек күренекле мәҙәниәт эшмәкәрҙәре. Мең ырыуы башҡорттарының башлығы шәхесе Ҡәнзәфәр бей айырым урын биләй. Ул башҡорттарҙы Рус дәүләтенә ҡушылыуға саҡыра һәм ҙур уңыштарға өлгәшә. Илебеҙҙең күп быуатлыҡ тарихын, башҡорт еренең күп милләтле мәҙәниәте менән бәйләп, киләсәк быуындар өсөн кешелектең тарихи-мәҙәни мираҫын һаҡлап ҡалырға бурыслыбыҙ".**

**Ришат Мансуров.**

**Ябалаҡлы ауылы**
**Шишмә районы**
**Башкортостан Республикаһы**



**2021 йылдың 28 сентяберендә мең иле үҙенең олуғ улы шәхесе Мусабей улы Ҡәнзәфәр бейгә Ябалаҡлы ауылында памятник асылды.**

## Ауыл уртаһында бер һәйкәл…

Ауылымда тағы таң атты,
Ер өҫтөнә тағы бер көн тыуҙы.
Ҡояш нурҙарына иркәләнеп,
Бар тәбиғәт шуға ҡыуанды.

Ауыл уртаһында бер һәйкәл,
Ҡәнҙәфәр бей бюсты ҡуйылған.
Ошо ерҙә бронза таш оҫтөндә,
Исемдәре ҡайып яҙылған.

Ғорур ҡараштарын алыҫ төбәп,
Күҙәтә һымаҡ барлыҡ донъяны.
Таң атҡанда уның йөҙҙәрен  дә
Һыйпап үтә ҡояш нурҙары.

Ҡарайҙыр Ҡалмаҡсура буйҙарына,
Олокүл буйы йәшел таллығына.
Дим буйҙарын наҙлап,
тулҡынлатып,
Ел дә иҫеп китә талғын ғына.

Бик буталыш замандар булған,
Меңдәр ере бик киң йомарт булған.
Ошо ерҙе баҫып алам тиеп.
Күп һанлыҡтар яуға ынтылған.

Нағай һаны гүмер буйы туймаҫ,
Бер ҙә ай-вайына ҡуймаҫ.
Теләгән ул меңде теҙ сүктереп,
Башҡорт илен үҙенә ҡол итергә.

“Һеҙ түләгән яһаҡ миңә бик әҙ” –
тиеп,
Ауылдарҙы килеп талаған.
Ҡуштандарын мең халҡына көсләп,
Үҙ яғына ҡайырып ҡараған.

Шул сағында йәш Кәнзәфәр тархан,
Тиҙ-тиҙ генә ҡорон йыйып алған.
Саҡырған ул Бөйрән, Ҡыпсаҡты,
Килгән Ғәйнә, тағы Юрматы.

Ярып-һалып ҡап уртаға мәсьәләне,
“Үтәмәйек Нағай һандың теләгәнен,
Барайыҡ беҙ ярҙам һорап Рәсәйгә,
Булыр ошо дөрөҫ юл бөтәбеҙгә”.

Кәнҙәфәр бей етәкләне сәфәрҙе,
Кәрәк-яраҡ , бөтә нәмә әҙерләнде.
Юл тоттолар туп-тура Ҡазанға,
Рәсәй башы Иван Грозный батшаға.

Кенязь Курбский илселәрҙе ҡаршы
алды,
Ихтибарлап һәр береһен тыңлап
алды.
Ҡайтып китте риза булып башҡорт,
Алып ҡайтты үҙ иленә бер грамота.

Нисә йылдар хәҙер бергә дуҫ йәшәй,
Башҡортостан һәм дә бөйөк Рәсәй.
Бергә кисерә ҡайғыһын да
шатлығын да,
Кәрәк булһа, изге яуҙың утлыһын
да.

Кәнзәфәр бей ауылыбыҙ уртаһында,
Исемдәре яҙылғандыр таҡтаһына.
Мең ырыуы - уның илкәйе.
Ябалаҡлы- тыуған төйәге.

/Йосопова Ғәйшә/